## Шәхестәребеҙ

# ЯКТЫ ЯҘМЫШ



*Японияның милли лидерҙары һәм илдәге төрки берләшмәләрҙең етәкселәре. Мөхәммәт-Ғабдулхай Ҡорбанғәлиев - (арткы рәттә, һулдан икенсе).*

Мөхәммәт-Ғабдулхай Ҡорбанғәлиев (шулай уҡ Ҡорманғәлиев, 1889-1972) - күренекле башҡорт дин әһеле, сәйәсәт һәм йәмәғәт эшмәкәре.

1889 йылда Ырымбур өлкәһенең Силәбе өйәҙенең Мөхәммәт-Ҡолой улусының Мәҙиәк ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында) ауылдың имам-хатибы ғаиләһендә донъяға килә. Атаһы Ғәбиҙулла (халыҡ араһында аҡһаҡ ишан ҡушаматы менән билдәле) дин әһеле булараҡ Арғаяш башҡорттары араһында киң танылған була, күп мөриттәрҙе етәкләй.

1914 йылда Мөхәммәт-Ғабдулхай тыуған ауылында мәҙрәсәне тамамлай. Был мәҙрәсәне атаһы 1885 йылда нигеҙләгән була.

1916 йылда Петербург мосолмандар округының етәксеһе вазифаһын башҡара башлай. Хәҙерге Силәбе өлкәһенең көньяғында башҡорт милли берәмеге - Арғаяш милли округын ойошторған ижтимағи-сәйәси төркөмдә әүҙем роль уйнай.

1917 йылда 1-се һәм 2-се башҡорттар ҡоролтайында ҡатнаша; бында ул Башҡортостан мосолмандары өсөн бойондороҡһоҙ дини идаралыҡ кәрәк, тип сығыш яһай, ерҙе дөйөмләштереү тәкдимдәренә ҡаршы сыға. Атаһы менән бергә, башҡорт милли дәүләтселек хәрәкәтендә Әхмәтзәки Вәлидиҙең төп оппоненты булып тора. Башҡорт автономияһын юғалтмаҫ өсөн Вәлиди Совет власы яғына күскәс, Мөхәммәт Ҡорбанғәлиев был аҙымды ҡабул итмәй - бөтә башҡорттар исеменән ул А.В.Колчак хакимлеген яклау тураһында иғлан итә. Аҡтар хәрәкәтенә ҡушыла, Колчактың ғәскәрҙәренә ҡушылған башҡорт частарында етәкселек итә.

1919 йылдың йәйендә Силәбелә йәнә бер башҡорттар ҡоролтайын ойоштороп маташа, аҙағынан Колчак ғәскәрҙәре менән бергә көнсығышҡа сигенә. Башҡорттарҙың рухи һәм дини берҙәмлеген һаҡлап ҡалыу өсөн аҡтар хәрәкәтенең башлыҡтары, атап үткәндә генерал Владимир Каппель, барон Унгерн фон Штернберг, атаман Григорий Семенов менән хеҙмәттәшлек итә.

1920 йылдың октябрендә Колчактың ғәскәрҙәре Чита ҡалаһын ҡыҙылдарға тапшыра. Мөхәммәт Ҡорбанғәлиев Манчжурияға күсә. Унда ул дин өлкәһендә имам һәм мөҙәрис булараҡ эшмәкәрлек ҡыла, күскән башҡорттарҙы милли ғөрөф-ғәҙәтте тотоу һәм туған телдә уҡытыу өсөн туплай. Манчжурияла йәйләп Японияның йоғонтоһо көсәйә. 1924 йылда Мөхәммәт Ҡорбанғәлиев Японияға күсә, Токиола мосолман мәхәлләһен туплай һәм уның дини идаралығын үҙ өҫтөнә ала.

1927 йылда Япония мосолмандары өсөн мәктәп аса. 1928 йылда бөтә Япония мосолмандары йыйыны ойоштора. Ғәрәп телендә китап баҫтырыр өсөн махсус типография аса. Ислам динен таратып, бөтөн Японияны йөрөп үтә; урал-алтай халыктары һәм уларҙың тарихы тураһында бер нисә китап сығара.

1932-1936 йылдарҙа Манчжоу-Го дәүләтендә (хәҙерге Манчжурияла мосолмандар ойошмаһы нигеҙләй; ошо дәүләттең Мукден ҡалаһында мәҙрәсә аса. "Япон Мөхбире" исемле журнал баҫтыра башлай, Алыҫ Көнсығышта беренсе тапҡыр Ҡөрьәнде баҫтыра.

Корея һәм Манчжурияның эре сауҙагәрҙәре менән тығыҙ мөнәсәбәттәр ҡора. Японияның ул осорҙағы сәйәси һәм ижтимағи етәкселәре (Японияның ғәскәри етәкселәре: Огасавара Наганари, Нанго Здиро, сәйәсмәндәр: граф Окума Сигэнобу, Тояма Мицуру) менән яҡындан таныш була. Японияның финанс олигархияларынан аҡса алып тора.

1938 йылдың 12 майында Токиола уның етәкселегендә төҙөлгән мәсет асыла.

Ул осорҙа Японияла торған мосолмандар илдең тышҡы сәйәсәтендә әүҙем ҡатнаша һәм тора-бара уның Азия илдәрендә үткәргән баҫҡынсылыҡ сәйәсәтенә йәлеп ителә. Әммә-ләкин Мөхәммәт Ҡорбанғәлиевтың әүҙемлеге Японияның мосолмандарға ҡарата берҙәм сәйә-сәтенә ҡаршы төшә, һәм илдең эске эштәр министрлығы уны "үҙ ирке менән" Манчжуриялағы Далянь ҡалаһына күсергә мәж-бүр итә.

Мөхәммәт Ҡорбанғәлиев исламдың Японияла урыны башҡа диндәр менән тиң булырға тейеш, тип эшмәкәрлек йөрөтә. Һөҙөмтәһендә, 1939 йылда илдең премьер-министры Киитиро Хиранума, ислам Японияла буддизм һәм христиан дине менән тиңдәш, тип белдерә.

1945 йылда Икенсе бөтә донъя һуғышы тамамланғас, Мөхәммәт Ҡорбанғәлиевты совет ғәскәрҙәре тотҡон итә. Мәскәү килтереп, уны хөкөм итәләр. 1955 йылғаса ул Владимир ҡалаһында төрмәлә ултыра. Иреккә сыҡҡас, ул Өфөгә килә, шунан Силәбегә ҡайта. Силәбелә ул ғүмер аҙағына хәтлем мулла вазифаһын башҡара.

**Башҡорт Википедияһы.**

**Мөхәммәд салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм:**

✔Минән һуң өммәтемдә буласаҡ өс төрлө хәлдән ҡурҡам: етәксе даирәләрҙең ғәҙелһеҙлек итеүе, йондоҙҙар менән күрәҙәлек итеүгә ышаныу һәм тәкдирҙе ялғанға сығарыу.

# КӨН ХӘҘИСЕ

✔Аллаһы Тәғәлә дүрт төркөм кешегә асыулы: ант итә-итә һатыу итеүсе, тәкәббер фәкир, аҙғын ҡарт һәм золомлоҡ ҡылыусы имам.

✔Өммәтем өс нәмәнән һис туктала алмаҫ: мәшһүрлектәре менән маҡтаныу, йыназа артынан тауышланып илау һәм тәбиғәт шарттары хаҡында күрәҙәлек итеү.

✔Һәләкәткә илтәсәк ете төрлө енәйәттән һаҡланығыҙ: Аллаһҡа ширек ҡатнаштырыу, сихыр, хаҡһыҙға кеше үлтереү, риба йәки етемдәрҙең малын ашау, һуғыш яланынан ҡасып китеү, иренә тоғро ҡатынға яла яғыу.

## Шиғри һүҙ

### ИҪКЕ "ҠӨРЬӘН"

*Өйөбөҙҙә "Ҡөрьән"дәрҙең*
*Иҫкеһе, яңыһы бар.*
*Иҫке "Ҡөрьән" тышлығында*
*Ырыуым тамғаһы бар.*
*"Ҡөрьән" һәм ырыу тамғаһы...*
*Ул - ҡанун, байраҡ, оран.*
*Ырыу башы аҡылына*
*Хайрандар ҡалып торам.*
*Иман һәм аҡыл берлеген*
*Иш итә алһа халҡым,*
*Йәшәрбеҙ, тип уйлаған ул,*
*Аңлаған ғүмер хаҡын...*
*Таушалған "Ҡөрьән". Иҫкергән,*
*Һарғайтҡан ваҡыт еле,*
*Яуҙа булған, сит-ситтәрен*
*Көйҙөргән ялҡын еле.*
*Был китапта ун быуындың*
*Яҙмышы, эҙе ҡалған,*
*Уң битенең уң яғына*
*Шул осор һүҙен һалған.*
*Шәжәрә ул. Олатайҙар*
*Хәтере "Ҡөрьән"гә тиң.*
*Ырыу-нәҫелем үҫеше*
*Ҡоласлы имәнгә тиң.*
*Тоҙло, асы тир эҙҙәрен*
*Китаптан күреп була.*
*Шул осорҙоң шаңдауҙарын*
*Ишетеп күңел тула...*

**Рафаил ХАФИЗОВ.**



## Уйлан

# МӘҮЛИТ байрамы тураһында

**Ғабделхаҡ хәҙрәт САМАТОВТЫҢ яҙмаһынан алынды**

Мәүлит айында мосолман донъяһында, ғәҙәттә, Пәйғәмбәребеҙгә (с.ғ.с.) бағышланған вәғәздәр һөйләнелә, уның тормыш юлы, үрнәге яҡтыртыла.

Бөтөн ғаләмде юҡтан бар ҡылып тәрбиә ҡылыусы Аллаһы тарафынан бәндәләргә ирештерелә торған хөкөмдәрҙе ябай ғына булған һәр кеше аша ирештереү лайыҡ та түгел, һәм һәр кешенең был хөкөмдәрҙе ҡабул итергә ҡабулиәте лә, мөмкинлеге лә юҡ, сөнки ул бөйөк Заттың хөкөмдәрен ирештереүсе фәрештә менән осрашырға, уның һүҙҙәрен аңларҙай зат ҡына бындай вазифаға лайыҡлы буласағы ла һәр аҡыл эйәһенә мәғлум булһа кәрәк. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәлә Үҙенең камил хикмәте вә тәдбире буйынса, бәндәләренең үҙҙәре араһынан яҡшы тәбиғәтле, күркәм холоҡло, паҡ ҡәлебле, үҙенең рәхмәт тәрбиәһе менән тәрбиәләнгән, һәм фәрештәгә юлығырлыҡ вә унан һүҙ ишетерлек дәрәжәгә өлгәшкән, унан Аллаһының һүҙҙәрен өйрәнеп, уны аңлап халыҡтарға да аңлатырлыҡ итеп ирештерергә лайыҡлы бер ҡәҙерле, хөрмәтле, инсафлы затты һайлап, халыҡтар араһына илсе итә Аллаһының ҡанундарын (динен) Аллаһы Тәғәлә теләгәнсә һис бер хыянатһыҙ итеп Аллаһыны танытыусы вә Уға ғибәҙәт ҡылыу рәүештәрен өйрәтеүсе зат пәйғәмбәр булалыр.

Ана шундай хөрмәтле пәйғәмбәрҙәрҙең иң һуңғыһы Мөхәммәд ғәләйһиссәлам - ахырзаман пәйғәмбәре, беҙҙең пәйғәмбәребеҙҙер. Ошо сәййидел мөрсәлин, пәйғәмбәрҙәрҙең дә пәйғәмбәрен бөтөн ғаләмгә рәхмәт өсөн яратылған (Вә мә әрсәлнәкә иллә рахмәтән лилғәләмин) тип Аллаһы Тәғәлә тарафынан күп сифаттар менән маҡталған заттың пәйғәмбәрлеген танып, иман килтереп, мин һинең өммәтеңмен, тигән кешегә, ул рәсүлүллаһының нәсәб шәрифенең һашимғаса 4 быуынын белеү важиб, ә Ғәднәнгәсә белеү мөстәхәб булыр. Мөхәммәд ибне Ғабдулла бине Ғабделмоталлиб бине Һашим бине Ғабдеманнаф.

Мәүлитте байрам итеү яраймы, әллә был бидғәт эшме, - тигән һорау халык араһында күп бәхәс тыуҙыра. Рәсүлуллаһтың тыуған көнөн айырым билгеләп, ғәйет (байрам) итеү 4-5 быуатта асыҡ түгел, быға дәлилдәр күренмәй. Алтынсы быуатта йомарт батшаларҙан булған Әрбәл падишаһы мөлөк Мозаффар Әбн Сәғид Күкбүре бине Ғәли бин Биктәкин Рәсүлуллаһҡа (с.ғ.с.) бик тә мөхәббәтле булғанлыҡтан, ошо Мәүлит ҡиссаһына оло аш-һыу әҙерләп, күп халыҡты туйҙырып, саҙаҡа таратыуҙы сығарған. Һәр йылда, Рәсүлуллаһтың тыуған көнөн хөрмәтләп, фәкирҙәргә һәм ғилем әһелдәренә мал менән саҙаҡа ҡылып ярҙам итә торған булған. Мәүлит байрамын иҫбатлай торған риүәйәттәр бар. Хафиз ибне Рәҗәб үҙенең "Ләтаъифел мәғариф" тигән китабында Мөслимдең Әбү Ҡатадәнән риүәйәт ҡылған бер хәҙисте килтерә. Рәсүлуллаһтан дүшәмбе көн ураҙа тотоуының хикмәтен һорағастары, ул әйткән (заликә йәүмә вөлидтө вә өнзиләт ғәләййә фиһиннөбүүәтө), йәғни "мин ул көндә тыуҙым һәм ул көндә миңә пәйғәмбәрлек килде", тигән.

Тимәк, Рәсүл ғәләйһис-сәлләм үҙенең тыуған көнөн һәм пәйғәмбәрлек килгән көнөн тигеҙ итеп, айырым ғибәҙәт менән олуғлай, Аллаһы тарафынан олуғ ниғмәт тип танырлыҡ халыҡтарға ла шөкераһаһы тейешлекте аңлатыу өсөн булһа кәрәк. Йәнә лә Хафиз Йәлеледдинел Сөйутый (рахимәһуллаһ) Мәүлит байрамын имам Бәйһаҡый иҫбат вә тәхрөж иткән хәҙис шәрифтән дә аңлашылалыр. Хәҙисте Әнәс бине Малик әйтә: "Рәсүлуллаһ (с.ғ.с.) үҙе өсөн ғаҡиҡа ҡылды" тип. Бәс, рәсүлуллаһтың был ғаҡиҡаһы үҙе тарафынан тәшәккөр булһа, өммәтенә дә шулай тәшәккөр юлын күрһәтер өсөн түгелме? Был хаҡта төпсөнөргә теләгәндәр, Шәйех Йософ бине Исмәғил Нәбһәниҙең "Хөжжәтуллаһи ғаләл ғәләмин фи моғжизәти сәййидил мөрсәлин" тигән китабына ҡараһын тип тәкдим ителә. Мәүлит байрамының дөрөҫлөгөндә беҙҙең уйыбыҙ. Юғарыла һөйләнгәнсә, ихлас күңелдән фәкәт Аллаһ ризалығы өсөн изге ниәт менән, мәжлес төҙөпмө, йәки мәсеттәрҙәме һөйөклө пәйғәмбәрбеҙҙең нәҫел-нәсәбенән алып һөйләргә, ҡиәмәт көнөндә беҙ ғасый (гөнаһлы) өммәттәренә шәфәғәт ҡылыр өсөн янған-көйгән минуттарға ҡәҙәр булған хәлдәрҙе халыкка еткерергә кәрәк. Ниндәй зат ул? Нисек йәшәгән? Ни эштәр башҡарғанлығын түгел, хатта ҡайҙа, ҡасан тыуғанын да белмәгән ғәфләттә булған халҡыбыҙға ирештереү, ҡыҫҡаса ғына булһа ла тәржемәүи хәлен белдереү тейешлелер. Миҫал: депутат һайлағанда ғына ла - ул һин һайлай торған кеше, уға шәһәдәт итеп тауыш биргәндә, уның кем икәнлеген, уның тәржемәүи хәлен белергә тейеш булаһың. Ә пәйғәмбәр? Уның ярҙамында Аллаһтың ҡанундарын ҡабул итәбеҙ, ул Аллаһ менән беҙҙең - өммәттәре - араһында вәсилә буласаҡ һәм дәһшәтле ҡиәмәт көнөндә уның шәфәғәтен өмөт итә торған кеше уның тыуған көнөн иҫкә алып, уға салауаттар уҡып, уның менән таныш булмағандарға уны танытыу кәрәк, уны оноттормаҫҡа, килер быуындарға да тапшырырға кәрәктер.